хан||ҡан, *баш.*—башлыҡ, хан
хас, *ғәр.* — ысын
хөбби, *ғәр.* — яратҡан, һейгән
хөсни, *ғәр.* — бик матур, һылыу
хужа || ҡужа || ғужа |(күзә, *фарс.* — хужа, эйә (ирҙәр исемен яһаусы ялғау)
хәсби, *ғәр.*—ҡәҙерле, хөрмәтле
хәйер, *ғәр.* — иң яҡшы, иң һәйбәт
һылыу, *баш.* — һылыу, матур; ҡыҙ бала
шан, *ғәр.*—дәрәжә
шат, *баш.* — башлыҡ, хаким
ша(h), *фарс.* — 1) хаким, башлыҡ, хужа; 2) эйәлек ялғауы (ир-ат исемдәренә ҡушыла)
шаһи, *фарс.* — солтан, батша; иң шәп, иң һәйбәт
шәмси, *ғәр.* — ҡояшлы, ҡояш һымаҡ
әбд||әбдел, *ғәр.* — бәндә, ҡол; мәңгелек (ғәҙәттә, ир-ат исемләренең алдынан ҡушыла)
әбү|| абу, *ғәр* — ата
ямал, *ғәр.* — матур, сибәр (күберәк ҡатын-ҡыҙ исеменә ҡушыла)

РЕГУЛЯРНЫЕ ИМЕНООБРАЗОВАТЕЛЬНЫЕ КОМПОНЕНТЫ

абд, *ар.* — раб, вечный (первая часть имен типа Абдрахман, Абдразак, Абдулла)

абдул, *ар.* — см: абд

абу, *ар.* — отец; компонент мужских имен

ак, *баш.* — белый; чистый; священный, великий; счастливый

асыл, *ар.* — 1) прекрасный, красивый, благородный; 2) корень, основа, суть; начало, происхождение (первая часть мужских и женских имен)

бай, *баш.* — богатый; хозяин; мужчина, муж (компонент мужских имен)

бану, *перс.*—дочь, девочка; госпожа, хозяйка, повелительница

бей, *баш.* — начальник, глава (компонент мужских имен)

бек, *баш.*—начальник, глава; муж; властелин, крепкий, прочный (компонент мужских имен)

биби, *перс.*—девочка; госпожа, дама, хозяйка (компонент женских имен)

бик, *баш.* — см. бек

бика, *баш.*—девочка, дочь; дама, госпожа, хозяйка

гали, *ар.*—великий, выдающийся; возвышенный, знатный (компонент мужских имен)

гужа, *перс.* — см. хужа женских имен)

дар, *перс.* — аффикс обладания: образует имена типа Гилем (знание, образование)+дар: образованный

гуль, *перс.* — цветок (компонент женских имен)

зада, *перс.* — 1) сын, дитя; царевич, принц; 2) аффикс обладания (компонент мужских и женских имен)

зиан, *баш.* — племянник, племянница (по обычаю с компонентом «зиан» давали имя ребенку, родившемуся в родной деревне матери)

зайн, *ар.* — украшение; узор

етдин, *ар.* — от дин «религия, вера» (компонент мужских имен)

иш, *баш.*—напарник, друг, товарищ (компонент мужских и женских имен)

камал, *ар.* — совершенный

кан, *баш.* — см. хан

кужа, *перс.* — см. хужа

кулЦгул, *баш.* — раб; помощник, друг (компонент мужских имен)

маги, *перс.* — луноподобная, красивая, как луна

мин, *баш.* — родинка, родимое пятно (компонент мужских и женских имен)

мир, *перс.* — глава (компонент мужских имен)

мурза, *перс.* — царевич; младший брат (компонент мужских имен)

ниса, *ар.* — девочка, дочь; госпожа, дама (компонент женских имен

нур, *ар.* — луч, свет (компонент мужских и женских имен)

сара, *перс.* — избранная, самая лучшая, драгоценная (компонент женских имен)

сара, *ар.* — госпожа; чистая, отборная

сара, *евр.* — родоначальница, глава

султан, *ар.* — царь, правитель; царица, царевна (компонент мужских и женских имен)

сура, *баш.* — сын, дитя; герой, смелый; помощник, друг, товарищ (компонент мужских имен)
сылу, *баш.* — красивая, прекрасная; дочь, девочка (компонент женских имен)
туган, *баш.* — родственник, родной; царь, глава
уллаҺалла, *ар.* — бог, всевышний
фархи, *ар.* — радостный (компонент мужских и женских имен)
фахри, *ар.* — славный, знаменитый (компонент мужских и женских имен)
хажи, *ар.* — паломник (компонент мужских имен)
хаир, *ар.* — самый лучший (компонент мужских имен)
хак, *ар.* — бог, всевышний
хан, *баш.*—хан, глава, правитель
хасби, *ар.* —дорогая, уважаемая (компонент женских имен)
хубби, *ар.* — любимый
хусни, *ар.* — красивыи, прекрасный (компонент мужских и женских имен)
хужа, *перс.* — хозяин, обладатель; глава; мужчина (компонент мужских имен)
шат, *баш.* — глава, правитель; хозяин
ша (х), *перс.* — 1) царь, правитель; хозяин; 2) аффикс обладания
шаги, *перс.* — султан, царь, самый лучший, превосходный
шамси, *ар.* — солнечный, светлый; сияющий (компонент мужских и женских имен)
ямал, *ар.*—красавица, красивая (компонент женских имен)
ян, *перс.* —душа; талан, счастье (компонент мужских и женских имен)
яр, *перс.* — 1) друг, товарищ; 2) аффикс обладания (компонент мужских имен)

ИСЕМДӘР ТАРИХЫ

— Исемең нисек? — тип һорай бөгөн ҡайһы бер йәштәр бер-береһе менән танышҡанда *.

— Исемең кем? — тип һораған беҙҙең ата-әсәләр таныш түгел кешегә өндәшкәндә.

— Ниндәй ырыуҙанһың? Кем балаһы булаһың? Атың кем? Кем атлыһың?—тип һорашыр булған ят кеше менән осрашҡанда борон замандарҙа беҙҙең ата-бабалар.

Кеше исемдәре ҡасан, нисек, тел һәм йәмғиәт үҫешенең ҡайһы баҫҡысында барлыҡҡа килгәндер — быны әйтеүе ҡыйын. Ләкин билдәле булған кешелек йәмғиәте тарихының һәр бер дәүерендә кеше исемдәре булған. Кеше исемдәре бик борон замандарҙа тәүтормош дәүерендә аныҡ телмәр (членораздельная речь) менән бер ваҡытта барлыҡҡа килгән тигән фекер йәшәй. Исемдәрҙең килеп сығышы бик боронғо замандарға ҡарауы тураһында «Алп батыр» тигән башҡорт халыҡ әкиәтендә бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бар: «Алп!.. тип ниҙер әйтмәк булған да бабай шунда йән биргән. Егет атаһын ҡәҙерләп кенә күмгән дә... атаһының балтаһын алып, ташҡа ҡайрап үткерләгән дә, урманға инеп киткән. Унда бер йыуан оҙон имән ағасы ҡырҡып үҙенә йәйә яһап алған. Өс айыуҙың тарамышынан кереш яһап тарттырған. Имән ҡырҡып, уҡ яһаған, ул уҡтың башағына осло таш ҡуйған. Шулай итеп, егет үҙенә ҡорал яһап ала ла донъя гиҙергә сығып китә. Уралтауҙың аръяғына сығып, ете аҙым атлаған да туҡтаған. Шунда уға бер ҡыҙ осраған. Ҡыҙ уға: — Исемең кем, егет, — тигән. Егет аптырап ҡалған. Кешелә исем тигән нәмә булыуын ул белмәй икән. — Нимә һуң ул исем? — тип һораған егет. Ҡыҙ йылмайып яуап биргән: — Бына һиңә кем тип өндәшәләр һуң? —тигән. Егет әйткән: —Атайым үлер алдынан

* Башҡорт әҙәби телендә «исемең кем?» тип һорау дөрөҫ тип ҡабул ителгән, ләкин «исемен, нисек?» тип яңылыш ҡулланыу хатта әҙәби әҫәр биттәрендә лә осрай.

ғына миңә «Алп» —тип өндәшкәйне, тигән. Ҡыҙ шунан: — Улай булғас, һин Алпбатыр булаһың инде, — тигән»[1].

Исем атау, исем ҡушыуҙың төп нигеҙе бына ошонда күренә. Исем иң элек кешегә мөрәжәғәт итеү, өндәшеү өсөн кәрәк булған. Кеше исемдәре ошо ихтыяж менән барлыҡҡа килеп, һуңынан йәмғиәт үҫеше барышында бер кешене икенсе кешенән айырыу өсөн хеҙмәт иткән тамға, билдә һымаҡ нәмәгә әүерелгән. Кеше исемдәре телдәге башҡа һүҙҙәр менән бергә йәмғиәттә барлыҡҡа килә һәм йәмғиәттә генә йәшәй һәм йәмғиәттең продукты булып йәшәүен дауам итә. Исемдәрҙең мәғәнәүи яғы ғына түгел, төҙөлөшө лә социаль факторҙарға буйһонған була[2]. Мәҫәлән, 1812 йыл Францияла Наполеонға хөрмәт йөҙөнән Наполеон исемен йыш ҡушҡандар. Ислам дине таралған осорҙарҙа күп халыҡтарҙа абд, мөхәмәт, дин һүҙҙәре менән исемдәр күбәйгән. Ә Октябрь революцияһынан һуң *Октябрь, Рева, Люция* һ. б. исемдәр барлыҡҡа килгән. Тимәк, йәмғиәттең идеологияһы һәр саҡ исемдәргә тәьҫир яһай. Кеше исемдәре башҡа яңғыҙлыҡ исемдәргә (мәҫ., ер-һыу атамаларына) ҡарағанда ла социаль тормошҡа нығыраҡ бәйле. Шуға күрә ижтимағи тормош үҙгәргән һайын исемдәр үҙгәреш кисерә килә.

Йәмғиәттең артабанғы үҫеше бер иш, бер төрлө исем йөрөткән кешеләрҙең күбәйеүенә килтерә: аҙаштарҙы — бер төрлө исемдәштәрҙе — бер-береһенән айырыу проблемаһы тыуа. Бер төрлө исемле кешеләрҙе бер-береһенән айырыу әсән өҫтәмә билдә, тамға ҡуйыла. Был билдә ҡушаматты барлыҡҡа килтерә. Тарихи яҡтан ҡарағанда ҡушаматтар кеше исемдәренән алда барлыҡҡа килгән, һуңынан күп кенә ҡушаматтар, бигерәк тә тышҡы ҡиәфәткә, йә башҡа Єер сифатҡа ҡарап бирелгәндәре, кеше исемдәренә әүерелеп киткән. Мәҫәлән, *Ҡарабаш, Ҡараҡаш, Аҡбаш, Миңлекәй, Кинйәкәй* һ. б. Кеше исемдәре телдә яңғыҙлыҡ исемдәргә ҡарай, һәр яңғыҙлыҡ исем сығышы менән уртаҡлыҡ исемгә барып тоташа. Ләкин һәр уртаҡлыҡ исемдән яңғыҙлыҡ исем яһалмаған кеүек, бөтә ҡушаматтар ҙа кеше исеменә әйләнмәй. Поляк ғалимы С. Роспонд әйтеүенсә, уртаҡлыҡ исемдәрҙең яңғыҙлыҡ исемдәргә әйләнеүе, ғөмүмән, исемдәрҙең килеп сығышы, яһалышы һәм артабанғы үҫеше телдең үҙенә башҡа бер законына буйһонған[3].

[1] БХИ, Өфө, 1959, т. 2, 55—56-сы б.

[2] Суперанская А. В. Общая теория имени собственного. М 1973, стр. 26.

[3] Роспонд С. Перспективы развития славянской ономастики: ж. Вопросы языкознания. 1962, № 4, стр. 12.

Тел һәр ваҡыт камиллыҡҡа ынтыла, ә телдең бер өлөшөн тәшкил иткән кеше исемдәрендә бындай ынтылыштың тағы ла көслөрәк икәне күренә. Ошо тенденция исемдәрҙең үҙгәреүсәнлек сифатын арттыра. Кеше исемләренең экспрессив (тәьҫир итеү) яғы ла уны башҡа яңғыҙлыҡ иҫемдәрҙән айырып тора. Кеше исемдәренә иркәләү, кесерәйтеү ялғауҙары ҡушылып, исемдең эмоциональ, тәьҫир итеү көсөн арттыра, уға буяу өҫтәй. Иркәләү, кесерәйтеү ялғауҙары уртаҡлыҡ исемдәргә лә күсә, ләкин уртаҡлыҡ исемдәр менән киң ҡулланылмай. Башҡорт телендә ҡулланылған -ҡай//-кәй, -ҡас//-кәс, -ҡына//-кенә һ. б. ялғауҙар кеше исемдәренең тамырына берегеп ҡатып ҡалған. Мәҫ., *Кинйәкәй, Ҡаныҡай, Миңлекәй, Ишкенә, Ҡолоҡас* һ. б. Был ялғауҙар бөгөнгө көндә исемдең бер бүленгеһеҙ өлөшө итеп ҡабул ителә.

Уртаҡлыҡ исемдең яңғыҙлыҡ исемгә күсеүе, яңғыҙлыҡ исемдең яһалыу процесы фекер үҫешенә лә бәйле. Шуныһы иғтибарға лайыҡ, һәр уртаҡлыҡ исем яңғыҙлыҡ исемгә туранан-тура әйләнмәй. Мәҫәлән, Бүребай, Төлкөбай тигән исемдәрҙе алайыҡ: бүре апелятивы (һүҙе) менән исем яһау өсөн был һүҙгә исем яһаусы «бай» ялғауы ҡушыла һәм кеше исеменә күскәндә бүренең бөтә сифаттары ла иҫәпкә алынмай, ә бер генә сифаты — көслөлөгө алына. Бүренең йыртҡыслыҡ сифаты кеше исеменә күсерелмәй.

Төлкө апелятивы менән яһалған исемдә лә уның насар яғы түгел, матур тиреһе, күркәмлеге иҫәпкә алынған. Ә бына инде ҡушамат биргәндә, киреһенсә, бүренең йыртҡыслығы, төлкөнөң хәйләкәрлеге күҙҙә тотола. Шулай итеп, «бүре» һәм «төлкө» һүҙҙәренең билдәле бер мәғәнә менән кеше исемдәренә әйләнеүен күрәбеҙ. Кеше исемләренең һәр береһенең үҙ мәғәнәһе бар, бер телдә лә мәғәнәһе булмаған исемдәр юҡ. Әлбиттә, бөгөнгө көнгәсә һәр халыҡта бөтә (тулы) мәғәнәләре менән исемдәр һаҡланып ҡалмаған. Шулай ҙа төрлө тарихи сығанаҡтарҙа, шәжәрәләрҙә, халыҡ күңелендә һаҡланған кеше исемдәрен тикшереп сығып, кеше исемдәре мәғәнәһе менән ошо халыҡтың ғөрөф-ғәҙәттәренә, йолаларына, культураһына,, эстетик зауҡына, донъяға ҡарашына, материаль тормош шарттарына бәйле килеп сығышын һәм ошо мәғәнә менән ҡулланылып йөрөүен иҫбатларға мөмкин.

* * *

Беҙҙең илдә антропонимика өлкәһендә исемдәрҙе мәғәнәүи яҡтан бүлеп тикшереүҙең тәүге өлгөләрен күрһәткән

рус ғалимы А. М. Селищев хеҙмәте ҙур әһәмиәткә эйә. Ул рус исемдәрен мәғәнәүи яҡтан 19 төркөмгә бүлеп анализлап сыға[4]. Ошондай ысул менән Н. В. Бирилло белорус исемдәрен 34 төркөмгә[5], Т. Ж- Жанузаков ҡаҙаҡ исемдәрен 30 төркөмгә[6], Э. Г. Бегматов үзбәк исемдәрен 19 төркөмгә бүлә[7]. Был йүнәлештә башҡорт исемдәре 20 төркөмгә бүленеп тикшерелде[8].

Төрки тел ғилемендә антропонимиканың артабанғы үҫешендә, төрки халыҡтары антропонимияһын өйрәнеү әлкәһендә һәр халыҡтың үҙ теле буйынса бай фактик материал туплауы ҙур роль уйнаны. Ошо тикшеренеүҙәр нигеҙендә кеше исемдәрен мәғәнәүи яҡтан классификациялауҙа яңы ҡараштар барлыҡҡа килде. Беҙҙең илдә беренселәрҙән булып кеше исемдәренең дөйөмләштерелгән төркөмдәргә бүленешен (дөйөм классификацияны), билдәле венгр ғалимы Л. Рашони схемаһына таянып, А. В. Никонов тәҡдим итте[9]. «Л. Рашони классификацияһының төп әһәмиәте шунда, — ти А. В. Никонов, — ул кеше исемдәрен төркөмләүҙә исем ҡушыуҙың дәлилләнеү сәбәбе булыу принцибын беренсе урынға ҡуя»[10]. В. А. Никонов схемаһы буйынса кеше исемдәре төп 3 төркөмгә бүленә:

I. Тасуири исемдәр.
II. Теләк исемдәр.
III. Арнау исемдәр.

В. А. Никоновтың исемдәрҙе ошо схемала бүлеүен күп ғалимдар хуплай. Ләкин бөтә исемдәрҙе ҡәтғи рәүештә ошо өс төркөмгә бүлеп сығып, һәр исемде бер генә төркөмгә бәйләп анализлау мөмкин түгел, сөнки бер үк исем ҡушылыу сәбәбе, дәлиле буйынса теләкте, тасуирлауҙы ла белдерергә мөмкин. Миҫалға иң боронғо иҫемдәрҙән булған ҡош-ҡорт, йәнлек-януар атамаларын, көн торошон, атмосфера күренештәрен белдергән исемдәрҙе тикшереп ҡарайыҡ: б ү р е һүҙе менән яһалған Бүребай исеменең ҡушылыуы өс төрлө сәбәпкә, дәлилгә ҡайтып ҡала: 1) ата-

[4] Селищев А. М. Происхождение русских фамилий, личных имен и прозвищ. Избранные труды, М., 1968, стр. 116.
[5] Бирилло Н. В. Белорусская антропономия. АДД, Минск, 1969.
[6] Джанузаков Т. Ж. Лично-собетвенные имена в казахсксм языке. АКД, Алма-Ата, 1981.
[7] Бегматов Э. А. Антропономика узбекского языка. АКД, Ташкент, 1965.
[8] Кусимова Т. Х. Древнебашкирские антропонимы. АКД, Уфа, 1975.
[9] Никонов В. А. Язык и общество. М., 1974, стр. 94—103
[10] Шунда уҡ, 95-се б.

һы һунарҙан бүре алып ҡайтҡан ваҡытта тыуған балаға «бүре» һүҙе менән исем ҡушҡандар (тасуири исем); 2) бала ошо бүре һымаҡ ныҡ, көслө булһын тигән теләк менән ҡушылған (теләк исем); 3) бүре алып ҡайтҡан ваҡытта тыуған балаға бүре һүҙе менән исем ҡушмаһаң, бала тормауы ихтимал, тип ҡушылғанда бүре һүҙе тотем булып исемгә әйләнә (арнау исеме).

Бер үк исемдең бер нисә төрлө сәбәп, дәлил менән ҡушылыуына ҡарата боронғо шәжәрәләрҙә ҡиммәтле мәғлүмәттәр һаҡланған. XVI быуатҡа ҡараған Юрматы шәжәрәһендә *Борнаҡ* бей исеме тураһында былай әйтелә: «Әмма Чачлы Дәрүиш бинең ғүмере ахры булды, уғлы юҡ ирде һәм ҡәрендәш — яҡыны юҡ ирде, бер генә ҡыҙы бар ирде... Әммә ул ҡыздан ике уғлы бар ирде, бере Бурнаҡ, бере Ядкар дигән иде. Әммә Бурнаҡ дип аны өчөн атадилар, һәмче уғлы-ҡызы юҡ сәбәбдин, борны аҡ атның ҡуйнына салып, ат исемен бирделәр. Аталары... йәш ваҡытында вафат ирде» [11]. Был исемде ҡушыуҙа ике төрлә сәбәп, дәлил килтерелгән. Беренсенән, балалары юҡ сәбәптән был баланың ғүмерен һаҡлау өсөн ат ҡуйнына һалғандар (был ғүмер теләүҙе күрһәтә—теләк исем); икенсенән, моронон аҡ ат ҡуйынына һалып, балаға, мороно аҡ — Борнаҡ тип тасуирлау исеме ҡушылған. Өҫтәүенә, арнау исеме тип фараз итергә лә урын бар.

Башҡорт йолаһына оҡшаш *Томанхан* тигән исем ҡушыу йолаһы Төркмән шәжәрәһендә килтерелгән: «...Ҡурҡуд ата: «Муниң аты Туманхан булсун», — тиде. Халыҡ әйтдиләр: «Мундин яхшыраҡ ат ҡуйғил»,—тидиләр. Ҡурҡуд ата әйтде: «Мундин яхши ат болмас, — тиде. — Ул көнкә... ҡайы хан үлде ирсә, безнең йуртимызны туман тутуб ҡараңғу булды. Бу уғыл туманда туғды. Аннин учун туман ат ҡуйдуҡ үә икенче туман уҙаҡ турмас, тиз китә турған нимәрсә булур. Туманлы күн афтаб (ҡояш) булур, туманның сунки (һуңы) яруҡ (яҡты) булмай булмаҫ. Аз ғина турған туманны бу уғланның йәшлекина ухшатибмен. Сунки афтабне бу уғланның икит (егет) булуп, атасы тәхтиндә ултуруб, дәүләтле үә уҙаҡ ғомерле булғанина ухшатибмен»,—тиде» [12]. Томан исемен ҡушыуҙа ике сәбәп, дәлил барлығы асыҡ күренә. Беренсеһе баланың тыуған ваҡытын, томан ваҡытын билдәләй (тасуири исем), икенсеһе балаға дәүләтле, бай һәм оҙон ғүмерле булыуҙы теләй (теләк исем).

[11] БШ, 28-се б.

[12] Кононов А. Н. Родословная туркмен (Сочинение Абул-гази хана Хивинского). М,—Л., 1958, стр. 58.

Юғарыла әйтелгәндәргә таянып, башҡорт исемдәрен; исем ҡушыу сәбәптәре (дәлилдәре) буйынса 3 ҙур төркөмгә бүләбеҙ.

I. ТАСУИРИ ИСЕМДӘР

1. *Баланың төҫөн, һ. б. үҙенсәлектәрен сағылдырған исемдәр*

Баланың берәй төрлө үҙенсәлегенә ҡарап исем ҡушыу — боронғо йолаларҙың береһе. Баланың аяҡ-ҡулы, тән төҙөлөшөндәге үҙенсәлектәр, сәсе, күҙе һ. б. иҫемдәрҙә күрһәтелгән. Мәҫәлән, *Баҙыҡ, Сибек, Сулаҡ, һулаҡай, Өлтөк, Әлтәкәй* (сәс), *Айҙар* (маңлай сәсе), *Айыуғолаҡ, Күккүҙ, Ҡарабаш, Ҡараҡаш, һарысәс, Аҡбала* һ. б. Ҡуҙыйкүрпәс эпосында Ҡарабай батырҙың улы тыуғас, уға *Ҡузыйкүрпәс* («ҡуҙы» — бәрәс, «күрпәс» — бөҙрә) тип сәсенең бөҙрәлеген тасуирлап исем ҡушылыуы әйтелә[13]. «Миң» һүҙе менән күп исемдәр яһалған: *Миңһылыу, Миңдекәй, Миңлебай, Миңлеғол, Миңде* һ. б. Борон, миңе булған балаға «миң» һүҙе менән исем ҡушмаһаң, миңе боҙола, тип уйлағандар. Был йола төрөкмәндәрҙә, үзбәктәрҙә, әзербайжан һ. б. халыҡтарҙа ла бар. Бала йөҙлөк, бөркәнсек, ҡау менән тыуһа, бәхетле, тип уға *Йөҙлөкәй, Иәҙөкәс, Йөҙлөкбай, Иөҙөбәк, Йөҙөкәй* тигән исем ҡушҡандар.

2. *Тәбиғәт күренештәренә бәйле исемдәр*

Башҡорт исемдәре составында тәбиғәт күренештәрен күрһәткән һүҙҙәрҙән яһалған исемдәр күп: *Буранбай, Бужансы, Буранғол, Томансы, Аяҙ, Аяҙғол, Ҡояшбикә, Аҡсыуаҡ, Байсыуаҡ, Айсыуаҡ, Яуа, Ямғур, Йәйсән, Борсаҡ, Елкәй, Елбулды, Елкәс, Болотбай* һ. б.

3. *Ваҡыт төшөнсәһенә бәйле исемдәр*

Кешенең аңында ваҡыт категорияларынан иң элек көнтөнгә, иртә-кискә бәйле, йыл миҙгелдәренән йәй-ҡышҡа бәйле исемдәр яһалып, һуңынан, йыл, ай, аҙна, көн атамаларына бәйле исемдәр барлыҡҡа килгән булырға тейеш.

[13] Беляев Т. Куз-Курпяч, башкирская повесть. — Башкирия в. русской литературе. Уфа, 1961, т. 1,-стр. 357.

Көн-төн төшөнсәһенә бәйле күк есемдәре атамалары ла баланын, тыуған ваҡытын билдәләп исемгә әйләнә. Мәç., *Айһылыу, Айсыуаҡ, Айбикә, Айбаҡты, Айгилде, Айсыл, Айҙағол, Айтаман, Көнбикә, Көнһылыу, Төннөк, Төнғатар, Көнтоғмош, Таңғатар, Таңатар, Таңбикә, Таңһылыу, Таңсулпан, Сулпан, Ҡояшбай, Ҡояшбикә* һ. б. Йыл миҙгелдәренә бәйле — *Ҡышты, Йәйлеғол, Йәйләү;* тәүлек ваҡытына бәйле — *Кискилде, Таңсыбай, Таңлыбай* һ. б. исемдәрҙе күрһәтергә мөмкин. Борон башҡорттар башҡа төрки халыҡтар менән бергә хайуан атамалары менән йөрөтөлгән ун ике йыллыҡ мөсәлде (календарҙы) ҡулланғандар. Шулай итеп, хайуан атамалары бер яҡтан көнкүреш, хужалыҡҡа бәйле, икенсе яҡтан, йыл атамаһы, өсөнсөнән, тотем булып кеше исеменә әйләнгән. Иыл атамаларынан ҡот йылдары (сысҡан, барс, аждаһа, йылҡы, эт, дуңғыҙ) кеше исемдәре булып йыш осрай. Ә инде йот йылдары һаналғандары (һыйыр, ҡуян, йылан, ҡуй, маймыл, тауыҡ) атамалары бөтөнләй осрамай тиерлек. *(Ҡуйбәк, Ҡуйһылыу* исемдәре мал атамаһы булып кеше исеменә әүерелгән булырға тейеш.) Боронғо күсмә халыҡтар йыл иçәбен Ҡояштың йондоҙлоҡтарға яҡынайыуына ҡарап билдәләгән. Был йондоҙлоҡ буйынса иçәп фәндә Ҡояш календары тип атала. Ошо ҡояш календары атамаларынан *Мизан* (сентябрь), *Әсетбай* (июль), *Саратбей* (Саратан булыуы ихтимал — .июнь) кеше исеме булып йөрөгән. Айҙың тыуыу, батыу ваҡыты менән иçәпләнгән һижрә йыл иçәбе лә башҡорттар өсөн таныш булған, һижрә йыл атамаларының күбеһе *(Мөхәррәм, Сәфәр, Рәжәп, Шаһбан, Рамазан, Шәүәл(и), Зөлҡәғиҙә, Зөлхизә, Йомадил* тигәндәре, баланың шул айҙа тыуыуын күрһәтеп (тасуирлап), исем итеп ҡушылған. Көн исемләренән «аҙна» һәм «йома» һүҙҙәре исем яһауҙа йыш ҡулланылған: *Аҙнабай, Йомабай, Йомаҡай, Аҙнабикә, Аҙнаҡай, Йомабикә* һ. б.)

4. Тормошта төрлө ваҡиғаларҙы сағылдырған исемдәр

Борон төрки халыҡтарҙа, шул иçәптән башҡорттарҙа ла, баланың тыуған ваҡытындағы ваҡиғаларға ҡарап исем ҡушыу йолаһы булған. Ошо йола нигеҙендә халыҡтың тормошон төрлө яҡлап күрһәткән исемдәр барлыҡҡа килгән: *Күсәк, Күсәкбай, Күсем, Күсекәй, Күсей, Күсмәк, Күсәш, Күсәрбай, Күсенбай* һ. б. исемдәр күсенеп йөрөүгә бәйле «күс» һүҙенән яһалған. «Юл» һүҙе менән: *Юлдыбай, Юлтый, Юламан, Юлсығол, Юлдыбикә, Юлсура, Юлбуға, Юлдаш, Юлбулды, Юлай, Юлдашбикэ, Юлдыҡай, Юлаҡ*

һ. б. исемдәр яһалған. Башҡорт тарихында билдәле урын; алған яу, сапҡын, болалар кеше исемдәрендә сағылыш тапҡан: *Яубатыр, Яуғасты, Яухужа, Яуҡай, Яубасар, Яулыбай, Яугилде, Яубикә, Босҡон, Босҡонбатыр, Боҫтанай, Ҡасҡын, Ҡасҡынбай* һәм *Болаш, Болғаҡ* һ. б. Ҡунаҡ, туй, байрам, баҙар ваҡытында тыуған балаларға *Ҡунаҡбикә,. Ҡунаҡбай, Туйсы, Туйбикә, Туйсура, Туйһылыу, Туйҡуныр, Туйбаҡты, Байрамбикә, Байрамғол, Байрас, Байрамғәли;* ураҡ өҫтөндә, бесән сапҡанда тыуған балаға *Ураҡбай, Ураҡсы, Ураҡ, Ураҡай, Бесәнсе* һ. б. исемдәр ҡушылған.

5. Төҫ атамаларынан яһалған исемдәр

Төҫтө белдергән һүҙҙәрҙән иҫемдәрҙә аҡ, ҡара, һары, ҡыҙыл, күк, йәшел, ала һүҙҙәре осрай. Ләкин һәр бер төҫ атамаһы бер нисә мәғәнә менән кеше исеменә өйләнгән. Мәҫ., аҡ — аҡ төҫ, пак, саф, бәхет һ. б.; ҡара — ҡара төҫ, көслө, ҡеүәтле, шәп; һары — һары, аҡ төҫ, иң шәп; ҡыҙыл — ҡыҙыл төҫ, матур; күк — күк,, сал төҫ; тамыр, нигеҙ; ала — сыбар, бер ҡатлы, ябай; яуыз, ҡөҙрәтле һәм саптар, ҡолан, ерән һүҙҙәре менән яһалған исемдәр бар: *Аҡһылыу, Аҡбай, Аҡбатыр, Аҡйегет, Аҡйән, Аҡкөсөк; Аҡсура, Аҡсыуаҡ, Аҡбикә, Аҡсолтан, Аҡсулпан, Ҡарабаш, Ҡарахан, Ҡаралан, Ҡараҡаш, Ҡарасабей, Ишҡара, Ҡараабыз, Ҡаракөсөк, Ҡарағол, Ҡарабикә, Ҡарасәс, һарығол, һарыман, һарыбай, Сарбай, Йәнһары, Сарманай, Сарынбәт, Ҡыҙылбай, Ҡыҙырас, Ҡыҙылғол, Күкбаш, Күкҡужа, Күккүҙ, Күкәш, Күгәш, Күкән,. Алағужа, Алабай, Алаҡай, Алабик* һ. б.

6. Үҫемлек, иген, сәскә атамаларынан яһалған исемдәр

Үҫемлек, сәскә, иген игеүгә бәйле исемдәрҙе тормош,, көнкүреште сағылдырған исемдәр менән бәйләп ҡарарға ла мөмкин. Был төр исемдәргә башҡорт телендә миҫалдар аҙ һаҡланған. *Арпа, Арпабатыр, Арыш, Борсаҡ, Иген, Етенбай* тигән исемдәр ер эшкәртеүгә, иген сәсеүгә бәйле килеп тыуһа, *Талботаҡ, Имәнҡол, Байтирәк, Муйылбикә, Ҡарағай, Сейәбикә, Ҡамыш, Ҡурай, Мышар, Ҡаранай, Емешбай, Сәсәк* һ. б. исемдәр тирә-йүн тәбиғәтте тасуирлап һәм матурлыҡ төшөнсәһе менән ҡушылғанды күрһәтә. Фарсы теленән үҙләштерелгән «гөл» һүҙе менән ҡатынҡыҙ исемдәре бик күп яһалған: *Гөлкәй, Гөлниса, Гөлдәр, Гөлшат, Гөлбаныу, Гөлһылыу, Гөлбикә, Гөлбостан* һ. б.

7. *Ер-һыу атамаларына бәйле исемдәр*

Балаға исемде тыуған еренә ҡарап ҡушыу ҙа боронғо йолаға инә. Был йола буйынса баланың тыуған урыны билдәләнә (ләкин был тер исемдәрҙең ҡайһылары арнау исеме булып та ҡарала). Географик термин булып йөрөгән туғай, арал, тау, ялан, урман, ҡыр, үҙән, утар һ. б. атамалар ҙа кеше исеме булып йөрөгән: *Аралбай, Урмантай, Яланбаш, Туҡай, Туғай, Үҙәнбай, Ҡырбатыр, Таулыбай* һ. б. Ер-һыу атамаларынан *Ирәндек, Уралтау, һамар, Иҙелбай, Иҙелбәк, Иҙелғужа, Туҡбирҙе, Туҡсораң, Туҡсаба, Туҡҡужа, Ыҡсура, Ыҡбирҙе, Яйыҡбай, Нөгөш, Ырғыҙ, Иргиз, Зиргиз* һ. б. йылға исеменә ҡайтып ҡала.

8. *Баланың ниндәй хәлдә (еңелме, ауырмы) тыуыуына ҡарап ҡушылған исемдәр*

Был төр исемдәргә башҡорт телендә материалдар аҙ. Ләкин киләсәкке тикшереүҙәргә нигеҙ формаһында әлегә билдәле булған «аҙна» һүҙе менән яһалған *Аҙналы* исеме тураһында әйтеп китеү кәрәк. Әгәр ҙә әсә балаға аҙна буйы ауырыһа, ошо хәлде билдәләп, балаға Аҙналы тигән исем ҡушҡандар (Азналин фамилияһы ошо исемдән яһалған). Башҡа төрки телдәрҙә был төр исем ҡушыу йолаһы осрамай. А. В. Никонов рустарҙағы *Томило, Истома* (ыҙаланыу) исемдәрен баланың ауыр тыуыуына бәйле тип ҡарай.

9. *Эш, хеҙмәт, һөнәрҙе сағылдырған исемдәр*

Боронғо исемдәрҙең бер төркөмө кешенең кәсебен, һәнәрен сағылдырып, боронғо йәмғиәттә кешенең эшмәкәрлеген, хеҙмәттең әкренләп камиллаша барыуын төҫмөрләргә мөмкинлек бирә. Боронғо төрки телдә шоңҡар сөйөүсе, һунарға ҡош өйрәтеүсе булған, ул кошсы тип аталған. Ҡошсы тигән кеше исеме ошо һүҙгә ҡайтып ҡала. *Илсе, Илсекәй, Илсебай, Илсен, Илсеғол, Сиру, Сирубай, Сирбай, Сирүкәй* («сиреү» ғәскәр, һалдат, һуғышсы тигәнде аңлата), *Һаҡсығол, Һаҡтағол, һаҡбай, һунарсы, һабансы, Ялсығол, Уҡсы, Мәргән, Алтынсы, Урмансы, Ҡаҙансы, Балтасы, Балтас, Сатусы* һ. б. исемдәр һәнәргә, кәсепкә бәйле барлыҡҡа килгән.

10. *Эш, яу ҡорамалдарын, һауыт-һабаны сағылдырған кеше исемдәге*

Эш ҡорамалдары атамаларынан — балта, балға, ураҡ, һабан, бысҡы, кәйлә, киле, таған, ҡармаҡ, мәскәү (ҡар-

маҡ төрө); яу ҡорамалдарынан — ҡылыс, ҡорман (уҡ һауыты), уҡ; һауыт-һаба атамаларынан — ҡаҙан, табаҡ, ҡашыҡ, иләк тигән һүҙҙәр кеше исеме яһаған. Был төр кеше исемдәре кешенең хеҙмәте, эше, һәнәре, кәсебе, тормош шарттары тураһында мәғлүмәт бирә. Мәҫ.: *Балға, Балта, Балтас* (10-ға яҡын исем), *Ыҡбалта, Балтағол, Балтаҡай, Балтабикә, Балтагэрәй, Балтай, Бысҡыбай, Киле, Килекәй, Иләкбай, Таған, Тағанай, һабанай, һабанғол, Һабансы, Ураҡ, Ураҡай, Ураҡбай, Тирмәнбай* һ. б.; яу ҡорамалдарынан «ҡылыс» һүҙе менән: *Ҡылысбай, Ҡылысхан, Ҡылыс (Ҡылысов* фамилияһы бөгөн дә осрай) һәм *Ҡорман, Ҡорманай, Уҡбай, Уғатар, Уҡбирҙе, Уҡтайхан* тигән кеше исемдәре билдәле.

Тормош кәрәк-яраҡтарынан башҡорт телендә байтаҡ һаҡланып ҡалған «ҡаҙан» һүҙенән яһалған кеше исемдәре айырыуса иғтибарға лайыҡ (Ырымбур ҡалаһының крайҙы өйрәнеү музейындағы ҙур-ҙур ҡаҙандарҙы күҙ алдына килтерһәк, боронғо күсмә тормошло халыҡтарҙа ҡаҙандың ниндәй мөһим роль уйнауын билдәләргә мөмкин). «Ҡаҙан» һүҙе һауыт мәғәнәһе менән дә һәм этноним булып та кеше исеменә әүерелеүе мөмкин. Ҡаҙан һүҙе менән яһалған кеше исемдәре төрлө формаларҙа күп төрки телдәрҙә һаҡланған. Башҡорт телендә *Ҡаҙан, Ҡаҙансы, Ҡотлоғаҙан, Ҡаҙантархан, Ҡаҙанай, Ҡаҙанғол, Ҡаҙанбай, Ҡаҙанкөн, Ҡаҙанҡай;* төркмән шәжәрәләрендә *Казан, Казанбек, Солор Казан* (Салр-казан-алп), сыуаштарҙа *Казан, Казанай, Казанчибай, Казандай;* Рашид ад-дин яҙмаларында *Г аҙан, Газанхан, Газанбахадур, Кадантайши, Казан* (был исем йылайыр ырыуынан тип күрһәтелә) [14] һ. б. исемдәр бар.

11. Аҙыҡ-түлек, кейем атамаларынан яһалған исемдәр

Был төр исемдәр башҡорт телендә аҙ һаҡланған. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, һаҡланып ҡалған кеше исемдәре генә лә боронғо кешенең көндәлек тормошонон, эстетик зауҡының билдәле бер үҫеш этабын күҙ алдына килтерергә ярҙам итә. Аҙыҡ-түлек атамаларынан *Аҙыҡ, Ризыҡ, Ризыҡҡужа, Буҙабей, Баллыбикә, Баллыбай* һ. б., кейемһалым, биҙәү нәмәләренән туҡыманың төрөн аңлатҡан һүҙҙәр менән исемдәр яһалған: *Айбарсын, Барсын, Барсынһылыу, Барсанай* (барсын — ебәктең бер төрө, Бар-

[14] Рашид ад-дин. Сборник детописей, т. I, кн. 1, М -Л. 1952, стр. 200—203.

сынһылыу исемен ҡайһы бер телселәр бөгөнгәсә «Барһынһылыу» тип яңылыш ҡулланалар), *Ебәк, Ебэкәй, Атлас; Тупый* (баш кейеме), *Япан, Кәпәс, Салбар, Итек, Итекша, Тана* (сын һиҙәп), *Төймәсәй, Муйынсаҡ, Йопар* (хушбуй), *Уҡа, Уҡабикә, Тәңкәбикә* һ. б.

12. һанды һәм һан төшөнсәһен аңлатҡан һүҙҙәрҙән яһалған исемдәр

Башҡорт телендә кеше исемдәре составында бер, ике, өс, биш, туғыҙ, туҡһан, йөҙ, мен, һандары һәм ал, тәүге, ҡуш, игеҙ, күп, күмәк тигән һан төшөнсәһен белдергән һүҙҙәр осрай. Мәҫ., *Тәүей, Тәүлесура, Тәүлембэт, Тәүләй, Тәүләбай, Тәүге, Тәүләкән* («Дәүләкән» атамаһы ошо һүҙҙән тип ҡарайбыҙ), *Тәүет, Тәүеней, Алйегет, Алгилде, Алда, Алдансиру, Алдагәрәй, Алдағуза, Икенсе, Игеҙәк, Ҡушар, Ҡушый, Ҡушали, Ҡушығол, Килдегуш, Ҡушкилде* һәм *Өскилде, Осҡа, Әсәкәй, Өстөм, Өстәк, Әҫтәкәй, Өсйән; Бербиш, Бишҡортҡабей, Бишембай, Бишуңғар, Бишем, Туғыҙбай, Туғыҙбикә, Туғыҙбак, Туғыҙаҡ, Упай, Ундан, Унғам;* илле, алтмыш, етмеш, һикһән һ. б. ҙур һандарҙы күрһәткән исемдәр тасуирлау исеменә ҡарағанда теләк исеменә тура килә. Ғаиләлә баланын, нисәнсе икәнен күрһәтеп исем ҡушыу йолаһы булған (был йола һуңға табан ғәрәп һүҙҙәре иҫәбенә күбәйгән). Тәүге балаға ал, тәү һүҙҙәре менән, һуңғы балаға *Төпсөк, Төпсөн, Кинйә, Кинйәбай, Кинйәбикә, Кинйәкәй, Кинйәбулат, Кинйәғәли, Кинйәабыз, Кинйәһолтан* һ. б. тип исем ҡушылған.

13. Оҡшаш исемдәр

Бер ғаиләлә балаларҙың исемдәрен бер-берeһенә оҡшатып ҡушыу — боронғо йолаларҙың береһе. Башҡорт әкиәттәрендә был фекерҙе раҫлай торған миҫалдар бик күп. Мәҫ., «Ҡамыр батыр» әкиәтендә[15] улдары — *Ҡамырбатыр* менән *Тамырбатыр.* «Аҡмырҙа» әкиәтендә *«Иәлмырҙа* ҡарттың оҡшаш исемле өс улы булған ти: өлкән улы — *Ишмырҙа,* уртансыһы — *Бикмырҙа,* кинйәһе — *Аҡмырҙа*[15]. «Ревизские сказки» материалдарында *Йондоҙ* һәм *Ҡондоҙ* Байсариндар, *Кейекбай* һәм *Үҙәнбай* Ямансариндар, *Айбул* һәм *Илбул* Байтимеровтар, *Буранбай* һәм *Ейәнбай, Төлкөбай* һәм *Ҡонанбай; Ҡарлуғас, Ҡарасәс, Һандуғас* (Татлығужа Әҙелғужиндың ҡыҙҙары), *Ҡолоҡас, Байрас,*

[15] БХИ. Өфө,1959, т. 2, 34, 89-сы б.

Алтынса; Айбикә һәм *Аҙнабикә, Аҙнаһолтан* һәм *Айһолтан, Биккенә* һәм *Ишкенә* тигән исемдәр бар. Оҡшаш исемдәр ҡушыу йолаһы бөгөнгө көндә лә киң таралған.

II. ТЕЛӘК ИСЕМДӘР

Баланың донъяға килеүе, ысынлап та, —тәбиғәттең бер мөғжизәһе, ул кешегә ҙур ҡыуаныс, йыуаныс биргән. Ә инде ауыр, ҡырағай тормош шарттарында бала ғүмеренең өҙөлөүе кешене шаңҡытҡан. Баланың үлеү сәбәбе ниндәйҙер бер илаһи көскә бәйле, тип ҡаралған. Баланың ғүмерен һаҡлау өсөн кешеләр төрлө йолалар уйлап сығарған. Был йолаларҙың төп йөкмәткеһе баланы насар, яуыз күҙтәрҙән һаҡлауға ҡайтып ҡалған. Бына ошо бала тыуғандағы шатлыҡтар ҙа, баланы һаҡлау өсөн булған тырышлыҡтар ҙа, быуаттар буйына формалашып, балаға яҡшы, изге теләк теләп исем ҡушыу йолаларын барлыҡҡа килтергән. Башҡорт телендә теләк йолаларына бәйле кеше исемдәре күп һаҡланған.

1. *Баланы һаҡлау йолаларына бәйле исемдәр*

а) Төрки халыҡтарына хас йолаларҙың береһе — баланы һатып алыу йолаһы — башҡорттарҙа әлегәсә билдәле. Ғаиләлә бала тормаған осраҡта бала тыуғас та уны тәҙрә аша күп балалы бер кешегә биреп торғандар. Билдәле бер ваҡыттан һуң был баланы ата-әсәһе мал биреп кире һатып алған. Бындай балаға *Һатыбал, Сатлыҡ, Сатлыҡбай* тигән исем ҡушҡандар. Икенсе бер йола — баланы табып алыу. Был балаға *Табылды, Табай, Табынбай, Табыш (Табыс)* тигән исемдәр бирелгән.

б) Һүҙҙең тылсымлы көсөнә ышанып, төрлө «һаҡлағыс» мәғәнәле һүҙҙәр менән исем ҡушҡандар. Мәҫ., *Торсонбай, Үлмәҫбай, Үлмәҫбикә, Торсонғужа, Иҫәнбикә, Иҫәнбай, Иҫәнғол, Тереғол, Теребирҙе;* «үлмәне, ҡалды» тигән мәғәнәләге: *Ҡалды, Ҡалдыбай, Ҡалдығол;* үлемде туҡтатыу әсән: *Туҡтар, Туҡтамыш, Туҡтағол* һ. б. исемдәр билдәле.

Боронғо башҡорт исемдәре араһында йыш осраған «и ш» (иптәш) һүҙе менән яһалған исемдәр ҙә балаға ата-әсәһенә иш булып, йәшәп китһен тигән теләк менән ҡушылған. Был фекерҙе ҡарағай-ҡыпсаҡ шәжәрәһендәге *Ишбулды* һәм *Ишкилде* тигән исемдәрҙе ҡушыу йолаһы раҫлай: «Ишбулды яудан алынып килгән бала булған. Улы булмаған сәбәпле Ҡубашҡа бирелде». «Икенсе мәртәбә яу-

дан йәнә бер уғыл алып килә, йәнә Ҡубашҡа бирелгән. Ишбулды, Ишкилде диб ике ҡарындан килгән уғылды уғылсыз кешегә биргәндәр, йәғни Ҡубашҡа»[16]. «Иш» һүҙе менән исемдәр бик күп: *Ишбай, Ишей, Ишкенә, Ишбикә, Ишҡол, Ишҡужа, Ишҡара, Ишҡусты, Ишбирҙе, Ишбулды, Иштуған һ. б.*

в) Боронғо халыҡтарҙа баланы һаҡлау өсөн яман, насар исем ҡушыу йолаһы ла булған, һүҙҙең тылсымлы көсөнә ышанып, яман исем ҡушҡас, балаға бер ниндәй яуыз күҙ ҡарамай, тип уйлағандар. Ошондай исемдәрҙең ҡайһылары башҡорт телендә һаҡланған. Мәҫ., *Яман, Ямантай, Яманҡыҙ, Ямансар, Яманғол, Яманбикә, Яманғужа, Ямансура, Буҡай, Буҡбаш, Сүбәк, Селәгәй, Сасыҡҡол, Кәкәй һ. б.* Был төр исемдәр башҡа төрки телдәрҙә лә бар.

г) Ҡаҙаҡ исемдәре белгесе Т. Жанузаков ҡаҙаҡтарҙа бала үлеп торған ғаиләлә баланы һаҡлауҙың тағы бер ысулы — балаға *Үтәгән, Үтәмеш, Түләгән, Түләмеш, Урынбаҫар* тип исем ҡушыу йолаһы барлығы тураһында яҙа[17]. Бында һүҙҙең тылсымлы көсөнә ышаныу ята. Бала гел үлеп торғас, ата-әсәһе тәңренән үтенеп бала һорай, һәм был үтенес, имеш, ҡабул була, үтәлә. Шуға күрә балаға исемде үтәү һүҙе менән ҡушалар. Башҡорт телендәге *Үтәгән, Үтәмеш, Үтәш, Үтәғол, Үтәбай, Үтәй, Үтәйән, Үтәбикә, Түләбай, Түләкәй, Түләкән (Түләгән), Түләй* тигән исемдәрҙе ошо йола менән ҡушылған тип ҡарарға тура килә. Башҡорт телендә көтөп, көһәп, һорап алған балаларға *һорапҡол, Ҡөҫәпҡол, Көһәмеш, Көҫәкәй, Көҫәп* тип теләп алған балаларға *Теләпҡол, Теләүбирҙе, Теләш, Теләүсе (Теләүсин), Теләүбай, Теләбикә* тигән исемдәр ҡушылған. *Ҡыуандыҡ, Һөйөндөк, һағындыҡ, Сөйөмбикә, Сөйәрғол, Сөйәрбикә, Сөйәрбай* тип ҡушылған исемдәр теләк теләүҙе лә, балаға ҡарата булған ҡарашты (тасуирлауҙы) ла күрһәтә.

2. Яҡшы, изге теләк, бәхет, уңыш теләп ҡушылған исемдәр

а) Башҡорт телендә ҡот, ураз, ырыҫ, йән, бәхет тигән һүҙҙәр менән яһалған кеше исемдәрендә ата-әсә ғаиләләге бәхетте, уңышты бала менән бәйләүе күренә. Мәҫ., *Ҡоткилде, Ҡотлобай, Ҡотлоғужа, Уразбай, Уразым, Ураз-*

[16] БШ, 113-сө б.
[17] Джанузаков Т. Обычаи и традиция в казахской антропонимии. Сб. Этнография имен. М., 1971, стр.-101.

гилде, Уразбак, Ырыҫкол, Ырыҫбикә, Йәнгилде, Йәнгил, Йәнбирҙе, Йәнсура, Йәнбикә, Йәнһылыу һ. б. исемдәр балаға бәхет, уңыш теләп ҡушылған. Бында исем ҡушыуҙың башҡа төрлө сәбәптәре лә асыла. Ҡотлобай тигән исемдә баланың ҡотло булып тыуыуы ла, киләсәктә ҡотло булһын, тигән теләк тә күренә. Яҡшы, изге һүҙҙәре менән яһалған *(Игебай, Яҡшыбай, Игелек (Игликов), Яҡшығол, Яҡшыбирҙе)* исемдәрҙең балаға яҡшы теләк менән ҡушылыуы һәр кемгә билдәле.

б) Әсә-атаның төрлө теләк теләп ҡушҡан исемдәренән рәттән ҡыҙ булғанда малай тыуһын, тип теләп ҡушҡан исем ҡушыу йолаһы ҡыҙыҡлы. Борон-борондан, материаль тормош талаптарынан сығып, ҡыҙ бала табыуға ҡарағанда ир бала табыу ата-әсә өсөн дан, шөһрәт итеп ҡаралған. Башҡорттарҙа рәттән ҡыҙ булһа, малай теләп был ҡыҙға *Яңыл* (яңылышып кит), *Яңылбикә* тип исем ҡушҡандар (был йола ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, тажик, үзбәк, ҡумыҡ, төрөкмәндәрҙә билдәле). Ошо йолаға бәйләнешле, малай өмөт итеп торғанда ҡыҙ тыуһа, *Өмөтбикә* тип исем ҡушылған. Ғаиләлә ҡыҙ бала булыуҙы туҡтатыу өсөн Кинйәбикә тип исем ҡушыу йолаһы ла билдәле.

3. Таш, төрлө металл атамаларынан яһалған исемдәр

Боронғо кешенең (таш быуат, тимер быуат) тарихында ҙур роль уйнаған *таш һәш тимер* бөтә төрки телдәрҙә кеше исемдәре составында күп һаҡланған. Был төр исемдәр бала таш, тимер һымаҡ ныҡ булһын, оҙаҡ йәшәһен, тигән теләк менән ҡушылған. Мәҫ., *Таштимер, Тимерйән, Тимербай, Тимерғәли, Биктимер, Иштимер, Юлтимер, Яҡшытимер, Йәнтимер, Тимербикә, Ташбулат, Бикташ, Ташбай, Ташкөрәк, Ташбаш* һ. б. Был төр исемдәрҙең ғаиләлә бала тормаған осраҡта ҡушылыуы ла билдәле. К о р о с һүҙе менән *Ҡорос, Ҡоросай, Ҡорошай* исемдәре бар. Ҡорос һүҙен һуңынан б у л а т һүҙе алыштырып, *Айбулат, Аҡбулат, Ташбулат, Тимербулат, Йәнбулат* тигән исемдәр яһалған. Таш, тимер, ҡорос, булаттар үҙҙәренең ныҡлығы менән иғтибарҙы алһа, *алтын, көмөш, алмас, ынйы* кеүек нәмәләр матурлығы менән кешенең күңелен биләй һәм матурлыҡ билдәһе булып, башта ҡатын-ҡыҙ исемдәрендә ҡулланыла, һуңға табан йәмғиәттә алтын-көмөш, алмас ҡиммәтле металл булып, көс, шөһрәт билдәһенә әүерелгәс, ир-ат исемдәре булараҡ та ҡулланыла. Башҡорт телендә *Алтынбай, Алтынбикә, Алтынсәс, Көмөшбай, Көмөшбикә, Көмөшкол, Көмөшһылыу, Еҙбикә, Алмас* (Әбйәлил

районы Асҡар ауылында Алмас тигән тауҙың атамаһы Алмас әбейҙең исеменән ҡалған), *Аҡыҡбай, Аҡыҡбикә, Ынйыбикә, Ынйыҡай, Баҡыр, Ҡалай* тигән исемдәр һаҡланған. Был исемдәр ныҡлыҡ, матурлыҡ, байлыҡ теләп ҡушылған.

4. Көслө януар, ҡош-ҡорт атамаларынан яһалған исемдәр '

Көслө януар, ҡыйғыр ҡоштар атамаһында кешегә йәшәү өсөн кәрәк булған көс, ҡыйыулыҡ сифаттары сағылған һәм шуға күрә, бала физик яҡтан көслө, батыр, ҡыйыу булһын, тигән теләк менән ҡош, януар атамалары исемгә әүерелгән. Иң боронғо исемдәрҙән *Барс, Иәнбарс, Ҡолбарс, Арслан, Арсланбәк, Арсланбай, Арсланғужа, Арслангәрәй, Ҡылыс Арслан, Арсланбабр, Арсланъюл* тигән исемдәр һаҡланған. *Ҡашҡарбай, Бүребай, Айыухан* исемдәре лә балаға көс, ҡыйыулыҡ теләп ҡушылған. Ҡошҡорт исемдәренән *Шоңҡар, Ыласын, Аҡҡош, Ҡарағош, Ҡобағош, Ҡарлуғас, һандуғас, Ҡарсыға* һ. б. билдәле. Ҡосҡонов фамилияһында һаҡланған *Ҡосҡон* (Ҡоҙғон) ҡошо атамаһы аҡыллылыҡ һәм оҙон ғүмер символы булып кеше исеменә әйләнгән. Бер төр мал-тыуар атамалары балаға байлыҡ, муллыҡ теләүҙе белдереп исем итеп ҡушылған *(Йылҡыбай, Атанбай, Ҡузыбай, Ҡузыбәк* һ. б,).

5. Социаль титул, дәрәжә, батырлыҡ атамаларынан яһалған исемдәр

Башҡорт исемдәре составында дәрәжә, титул, батырлыҡ атамаларынан бей, бәк, бай, бикә, тархан, түрә, ҡан (хан), ҡол, алп, батыр, буҡа, бүре, барс, сура, шаҡман, кәбәк һәм ғәрәп, фарсы телдәренән ингән солтан, ҡужа, мырҙа һүҙҙәре билдәле. Ошо атамалар менән яһалған исемдәр мәғәнәләре менән икегә бүленә: 1) баланың ҙур кеше булыуын теләп дәрәжә, титул атамалары менән ҡушылған теләк исемдәр; 2) ил, халыҡ алдында балырлығы, аҡыллылығы менән кешенең үҙе яулаған дәрәжә, титул атамалары менән яһалған (тасуири) кеше исемдәре.

1) Балаға үҫеп еткәс халыҡ алдында абруйлы, хөрмәтле, ҙур кеше булыуын, йәмғиәттә билдәле урын алыуын теләп бәк, бей, бай, түрә, сура, кәбәк, боға, батыр, алп, ҡан (хан), ҡол, ҡужа (хужа), солтан, мырҙа, бикә, ниса, биби һүҙҙәре менән исем ҡушҡандар. Мәҫ.: *Ишембай, Ти-*

мербәк, Сурабай, Түрәкәй, Иштүрә, Байтүрә, Байгөбәк, Аҡкөбәк, Батырҡай, Батырхан, Ҡаныҡай (Ханыҡай), Ейәнсура, Аҡсура, Ҡансура, Ҡаймырҙа, Ишсолтан, Солтанғол, Яҡшығол, Ҡарағол, Ишбикә, Аҡбиби, Ғилемхан һ. б.

Йәмғиәт үҫешендә экономик, политик формацияларҙың алышыныуы арҡаһында был дәрәжә атамалары һуңынан ябай исем яһаусы компоненттарға әйләнгән. Башҡорт исемдәре араһында иң күп таралған бей, бәк һүҙҙәрен алып ҡарайыҡ. Тарихсылар билдәләүенсә, бей, бәк һүҙҙәре титул булып феодализм осоронда, йәмғиәттә политик власть үҫкән ваҡытта киң ҡулланылған. XVI быуаттарҙан һуң бей, бәк һүҙҙәре ҡулланылыштан сыға башлай һәм улар урынына «б а й» һүҙе исем яһаусы компонент булып киң тарала[18].

2) Борон замандарҙан кешегә, ил батырҙарына ил алдында күрһәткән ҙур хеҙмәттәрен, ил тотоуҙағы, ил менән идара итеүҙәге аҡыллылыҡтарын, ил һаҡлауҙа күрһәткән батырлыҡтарын билдәләп, дәрәжә, титул бирер булғандар (был төр исемдәр тасуири исем тип тәүге бүлектә ҡаралырға тейеш булһа ла, уларҙы бүлеп тормайынса, ошонда ҡарауҙы уңайлы таптыҡ). Ошо дәрәжә атамалары һуңынан кешенең ҡушаматына, ә исеменең бер бүленмәҫ өлөшөнә әйләнгән. Бындай исемдәр бөгөнгө көндә беҙгә боронғо башҡорт йәмғиәтенең үҫеш тарихы тураһында мәғлүмәт һаҡлауы менән ҡиммәтле. Дәрәжә атамаларынан башҡорт тарихында билдәле шәхес Ш ә ғ ә л и Ш а ҡ м а н д ы ң исеме иғтибарға лайыҡ. XI быуат ҡомартҡыһы Мәхмүт Ҡашғари һүҙлегендә «с о ҡ м а н» һүҙе батырҙарға, бәһлеүәндәргә бирелгән батырлыҡ дәрәжәһе атамаһы тип әйтелә[19]. Башҡорт исемдәре составында т а р х а н, д а р х а н титулдары бар. Был төрки халыҡтарына борон-борондан (ислам диненә ҡәҙәр) билдәле булған. Ибн Фаҙлан әйтеп киткән дәрәжә атамаһы[20] башҡорт исемдәрендә лә һаҡланған. Тарханлыҡ дәрәжәһе башҡорттарға рус ғәскәрҙәре менән бергә походтарҙа ҡатнашып, шунда күрһәткән батырлыҡтар өсөн бирелгән. Мәҫ., *Алдардархан, Бикдархан, Аҡынсыҡдархан, Ҡушайдархан һ. б.* Башҡорт исемдәрендә һаҡланған б о ғ а (б у ҡ а) титулы VIII быуат орхон-төрки яҙмаларында ла билдәле. Мәҫ., *Ҡыпсаҡ боға, Тимерҡара боға, Сасбоғабей, Боғабей, Юлбуға бей* һ. б. Боронғо төрки титул атамаһы —

[18] БШ, 201-се б.
[19] К а ш г а р и М. Инд., 229-сы б.
[20] И б н-Ф а д л а н, стр. 928.

«сура» башҡорт исемдәрендә күп һаҡланған; *Сурабатыр, Сураман, Сурағол, Байсура, Сурабай, Сынсура, Алтынсура* һ. б. «Түрә» һүҙенең тәүге мәғәнәһе йола, тәртип тигәнде аңлата, һуңынан ошо закон, йолаларҙы тотоусы, «аҡыллы» мәғәнәһе менән башлыҡ, начальник тигән мәғәнәлә кеше исеменә әйләнә: *Йәнтүрә, Иштүрә, Байтүрә, Түрдкәй, Түрәбирҙе, Ҡантүру.* 1812 йылғы Ватан һуғышы геройы *Ҡаһымтүрәнең* исемендә түрә һүҙе башлыҡ, хәрби начальник тигән мәғәнә менән бирелгән. Официаль дәрәжә, титул атамаларынан башҡа, халыҡ батырҙарға хөрмәтләп батырлыҡ, аҡыллылыҡ ҡушаматтары ҡушҡан. Был ҡушаматтар ҙа кеше исеменең бер өлөшөнә әмләнеп киткән. Мәç., *Алғышай батыр, Ямантай батыр, Ҡартбатыр, Боçҡонбатыр, Яубатыр, Илбатыр, Туйбатыр, Ҡырбатыр, Арсланбабур* * һ. б. Боронғо башҡорт исемдәре араһында «ир» һүҙе менән яһалған *Иртуған, Ирҡол, Ират, Ирбай, Ирман, Ирғужа, Иртукән, Иркәй, Ирәмәт, Ирғәли, Ирғөбәк* исемдәре бар. «Ир» һүҙе менән кеше исемдәре бик боронғо замандарға ҡайтып ҡала, улар VI, VII, VIII быуат төрки яҙмаларында осрай. Был иçемдәрҙә «ир» һүҙе батыр, ҡыйыу, һуғышсы тигән мәғәнәне аңлата[21].

III. АРНАУ ИСЕМДӘР

1. Табыныу йолаларына бәйле исемдәр

Боронғо кешеләр, ысынбарлыҡты, тәбиғәттәге төрлө үҙгәрештәрҙе аңлай алмау сәбәпле, тормоштағы һәр нәмәне ниндәйҙер бер мөғжизәгә бәйләп, тәбиғи булмаған бер илаһи көскә ҡайтарып ҡалдырғандар. Тәбиғәт алдындағы көсһөҙлөк кешене төрлө хөрәфәткә ышанырға, һыуға-ергә, күккә, тау-ташҡа һ. б. күп нәмәләргә табынырға мәжбүр иткән. Шулай итеп, күп нәмәләргә табыныу йолалары, мәжүсилек барлыҡҡа килгән. Ошо табыныу йолалары, тотемдар менән бәйле бик күп боронғо башҡорт исемдәре беҙгә килеп еткән.

Башҡорттарҙың борон күп нәмәләргә табынып йәшәүе тураһында беренсе башлап ғәрәп хәлифенең илсеһе Әхмәд ибн Фаҙлан яҙып ҡалдырған. Ул Ғәрәп иленән Болғар иленә китеп барышлай 921—922 йылдарҙа башҡорттарға

* «Бабур» тигән батырлыҡ атамаһын Арслан тигән егеткә «бабыр» тигән ҡурҡыныс януарҙы үлтергән өсөн биргәндәр.

[21] Малов С. Е. Памятники древнетюркской письменности Монголии и Киргизии. М.—Л., 1959, стр. 91.

тейеп китә һәм башҡорттар тураһында былай ти: «Мы видели, как (одна) группа поклоняется змеям, (другая) группа поклоняется рыбе, (третья) группа поклоняется журавлям...»[22]. Ибн Фаҙлан әйткән табыныу объекттарының — «аллаларҙың» күбеһе башҡорт исемдәрендә ырыу, ара атамаларында сағылыш алып, бөгөнгәсә һаҡланып ҡалған. Мәç.: *Ел, Елҡас, Елкәй* — «ел» һүҙенән; *Төннөк, Төнөш, Төнғатар, Төнөш* — «тән» һүҙенән; *Ҡышты* — «ҡыш» һүҙенән; *Йәйләғол, Йәйсән, Йәйләү* — «йәй» һүҙенән; *Ямғырсы, Ямғур* — «ямғыр» һүҙенән; *Атйетәр, Атмен, Атъюҡ, Бурнаҡ* — «ат» һүҙенән; *Көнэйә, Көнбаҡ, Көнбай, Көнсыуаҡ, Көнгилде, Көнһылыу* — «көн» һүҙенән; *Тәңребирҙе, Тәңреғол* — «тәңре» һүҙенән; *Һыуһылыу, Иҙелбай* — «һыу» һүҙенән; *Талтыҡ, Ҡарағай, Имәнғол Талботаҡ* — ағас атамаларынан яһалған. Башҡа табыныу объекттары атамаларын ырыу, ара исемдәрендә күҙәтергә мөмкин. Мәç.: йылан, ҡырйылан, иҙел йылан, балыҡсы, барҡылдаҡ торна һ. б. Табыныу йолаларына, тотемдарға бәйле иçемдәрҙән бүре, айыу, ат, эт тотемдары айырыуса әһәмиәтле. Януар, хайуан атамалары-тотемдар тураһында төрки халыҡтары тарихында күп мәғлүмәт тупланған. Баланы һаҡлау йолалары араһында бүре культы менән бәйлеләре күп күрһәтелгән. Көслө януар, йәнлек атамалары тотем булып кеше исемдәрендә һаҡланған *(Бүребай, Аҡбүре, Байбүре, Бүрехан, Айыухан, Айыусы, Айыуҡай, Айыуҡас, Айыубай* һ. б.). Ындай табыныу йолалары, тотемдарға бәйле исемдәр араһында эт, көсөк һүҙҙәре менән яһалған кеше исемдәре һәм баланы һаҡлау өсөн булған исем ҡушыу йолалалары махсус урын алып тора. Этте боронғо кешеләр баланың бер һаҡсыһы тип ҡарағандар. Бала тыуып, бер нисә көн үтеүгә, уға беренсе — «эт күлдәге» (көсөк күлдәге) кейҙергәндәр. Ҡырҡ көн үтеүгә: «Балам эт кеүек ныҡ, көсөк кеүек әрһеҙ булһын!» тип күлдәкте көсөк муйынына кейҙереп ебәргәндәр. Икенсе бер йола — бала тыуғас та уны эт ялғашына һалып, уға *Этйеймәç, Эталмас* тип исем ҡушыу ҙа эт культына, баланы һаҡлауға бәйле. Балаға тәүге «эт күлдәге» кейҙереү йолаһы ҡырғыҙҙарҙа, ҡаҙаҡтарҙа билдәле. Башҡорт телендә кеше исемдәре, кеше исемләренән яһалған ауыл атамалары (антропотонимдар) составында осраған «эт, көсөк» һүҙҙәре береһе лә һис бер баланы хурлап, түбәнһетеп түгел, ә баланың ғүмерен һаҡларға теләп, табыныу культы — тотем булып кеше исеменә әйләнгән. Башҡорт телендә борон эт атамалары куп

[22] Ибн-Фадлан, стр. 131.

булған: эт, к ө с ө к, к ә б ә к, б а р а к (оҙон ялбыр йөнлә, йылғыр һунар эте). Бала тормаған саҡта баланы эт ҡуйынына һалып имеҙеп алып, уға Э т и м г ә н тип исем ҡушыу тураһында Лоссиевский яҙып ҡалдырған[23]. Эт тотемы менән бәйле яһалған кеше исемдәре күп төрки һ. б. халыҡтарҙа һаҡланған. Башҡорт телендә: *Этбай, Әтекәй, Эткенә, Этҡол, Этйән, Эткөсөк, Этсеюл, Этҡусты, Этекәс, Көсөк, Көсөкбай, Көсөк бей, Көсөкэй. Көсөкҡол, Аҡкөсөк, Байкөсөк, Муйнаҡ, Барак, Шаһибарак, Күбәк, Аҡкүбәк, Байгүбәк, Ҡарағүбәк, Аскүбәк* һ. б. исемдәр билдәле.

Боронғо кешенең тәбиғәт алдындағы көсһөҙлөгө уны төрлө күк есемдәренә, тәбиғәт күренештәренә табынырға мәжбүр иткән, тигәйнек. Ай, күк, йондоҙ, буран, томан, сыуаҡ, көн, тән, ҡояш һүҙҙәре менән яһалған кеше исемдәре ошо йолаларға бәйле барлыҡҡа килгән: *Айбаҡты, Көнсыуаҡ, Айһылыу, Көнһылыу, Көнбай, Көнгилде, Сулпан, Аҡсулпан, Бурансы, Томансы, Ҡояшбай, Ҡояшбикә* һ. б.

2. Этнонимдарҙан яһалған исемдәр

Тарихсылар әйтеүенсә, күсмә тормошта йәшәгән халыҡтарҙа ырыу, ара, ҡәбиләләрҙең ныҡ һаҡланы.уы, ә күсмә тормоштан сығып, утыраҡлы тормошҡа күскән төрки халыҡтарҙа ырыу ҙа, уның атамаһы ла һаҡланмауы билдәле[24]. Башҡорт телендә ырыу, ара, ҡәбилә атамаларынан яһалған кеше исемдәре байтаҡ. Был төр исемдәр арнау (бағышлау) исемдәре булып барлыҡҡа килгән. Борон замандарҙа ырыу, араға атама итеп шул ырыу, ара башлығының исемен биргәндәр. (Мәҫ., тамъян ырыуы башлығының исеме *Тамъян)*. Башҡорт исемдәре араһында *Субы, Субай, Әлкә, Сыуашай, Аҡсыуаш, Биксыуаш, Аҡсирмеш, Моҡша, Ҡыпсаҡ, Ҡаҙаҡ, Ҡаҙаҡбай, Ҡалмаҡ, Ҡалмаҡҡол, Ҡаҙаҡҡол, Төрөкмән, Нуғай, Нуҡай, Ноғай, Нағай, Ноғайсура, Ноғайбикә, һарт, һартбай, һартҡол, Сыңғыҙ, Мишәр, Боҙоҡ, Ҡай, Ҡайбатыр, Тәкәй, Күбәләк, Төмәнсура* һ. б. байтаҡ ырыу исемдәре һаҡланған. Был төр кеше исемдәре боронғо халыҡтар аралашыуыньвд бер сатҡыһы булып беҙгәсә килеп еткән.

[23] Л о с с и е в с к и й М. В. Былое Башкирии и башкир по легендам, преданиям и хроникам.—Справочная книжка Уфимской губернии. Отд. V, Уфа, 1883.

[24] А р и с т о в Н. А. Заметки об этническом составе тюркских пламен и народностей и сведения об их численности. Живая старина. Вып. III и IV. СПб., 1896, стр. 285 (артабан — Аристов).

3. *Туғанлыҡ-ҡәрҙәшлек терминдарынан яһалған исемдәр*

